# «Аманат»лы халыҡ беҙ!..



Башҡорттарым, уҡыу кәрәк, уҡыу кәрәк!




PEJONIR
XVII
№1


СССР
СССР
ПИОНЕР


АМАНАТ
2014, март,
85
йыл бергә!

# МирхәйҙәрМөхәмәтйәро
# в





# “АМАНАТ” ТАРИХЫ – ФОТОЛАРҘА

1983

“Пионер” журналы хеҙмәткәрҙәре һәм лауреаттары. Алда, һулдан өсөнсө – баш мөхәррир Динис Булэков.

1999

“Аманат” журналы. Алда, һулдан өсөнсө – баш мөхәррир Нияз Мәһәҙиев.

2004

“Аманат” журналы хеҙмәткәрҙәре. Алда, һулдан икенсе – баш мөхәррир Артур Дәүләтбәков.

2007

“Аманат” журналы хеҙмәткәрҙәре. Алда, һулдан икенсе – баш мөхәррир Сәлмән Ярмуллин.

2014

“Аманат” журналы хеҙмәткәрҙәре бөгөн.



«Бик тә яҡын минең өсөн «Пионер» журналы. Хеҙмәт кенәгәмдә лә беренсе эшем «Пионер» ҙа – әҙәби хеҙмәткәр» тип теркәлгән.



# "АМАНАТ"КА ЯЗЫЛ ДА, БҮЛӘК ОТ!



2014

мәҙәниәт йылы

год культуры

# Оло йөрәкле балалар!



## Уҡыусылар! Уҡытыусылар! Ата-әсәләр!

2014 йылдың 2-се ярты йыллығына "Аманат"ҡа яҙылыуҙың иң ҡыҙыу осоро бара. Ойҙегеҙ, журналға дөррәүерәк яҙылайыҡ. Сөнки уҡыу йылы тамамланыуға ла күп ҡалманы. Ғәҙәттә, каникул башланғас "Аманат"ҡа яҙылырға онотоусылар күбәйә. Әммә күптәр аҙаҡ, яйлап йәрәгәнлектәренә үкенеп, беҙгә шылтырата торған. Шуға күрә яратҡан һәм көтөп алған баҫмағыҙға бөгөндән үк, әле бер нәмәне лә онотмаған осорҙа яҙылып ҡуйыуығыҙ хәйерле. Үҙегеҙҙе Башҡортостандың берҙән-бер башҡорт телендәге балалар-үҫмерҙәр баҫмаһын уҡыу ләззәтенән мәхрүм итмәгеҙ.

Өҫтәүенә ҡиммәтле бүләктәр отторолған сираттағы "Яҙыл да бүләк от!" уйынының купоны "Аманат"тың сентябрь айы һанында баҫтырыласаҡ һәм уны тултырып ебәреп, уйында ҡатнашырға мөмкин буласаҡ. Журналға яҙылмағандар, тимәк, уны күрмәй ҡаласаҡ.

Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ: 1 апрелдә иғлан ителгән 2014 йылдың икенсе ярты йыллығына журналға яҙылыу кампанияһы менән бер үк ваҡытта "Бөтөн синыф менән – "Аманат"ҡа!" һәм "Бөтөн мәктәп менән – "Аманат"ҡа!" акциялары ла дауам итә. Акцияла ҡатнашҡан мәктәптәргә – "Аманат"тың стена сәғәте, ә синыфтарға синыф етәкселәренең исем-шәрифе атап үтелгән махсус Маҡтау билдәһе тапшырыласаҡ. Әйткәндәй, был Маҡтау билдәләре уҡытыусыларға категорияларын күтәреүгә ярҙам итә. Журналға яҙылыуҙы айырым ойоштороусы уҡытыусы, китапханасылар ҙа иғтибарҙан ситтә ҡалмаясаҡ!

Журналға ярты йылға яҙылыу хаҡы – 232 һум 98 тин. Шуға ла иғибар итегеҙ: был яҙылыу кампанияһынан башлап "Аманат"ты почта бүлексәһенә яҙҙыртып, үҙегеҙ барып алып йөрөү мөмкинлеге лә булдырылды. Был осраҡта журналға яҙылыу 175 һум 80 тин генә буласаҡ, йәғни хатта былтырғыға ҡарағанда ла арзаныраҡҡа төшәсәк.

"Аманат"ҡа тоғро ҡалайыҡ!

## 11-селәр, алданмағыҙ!

Иғтибар, иғтибар! Интернет селтәрендә педагогик үлсәмдәр Федераль институты мөһөрләгән ялған БДИ мәсьәләләрен һаласаҡ!

Әйткәндәй, социаль селтәрҙәң төрлө төркөмдәрендә күптән инде "БДИ – 2014"кә әҙер яуаптар" һатыла башланы. Ә ысынында һатыу менән шөғөлләнгәндәр БДИ мәсьәләләренең асыҡ базаһындағы мәғлүмәттәрҙе былтырғы БДИ эштәре менән берләштереп, уҡыусыларға тәҡдим итә. Шуға күрә үҙәге алым БДИ мәсьәләләрен һатып, аҡса эшләргә теләүсе насар ниәтле кешеләрҙең ашмаҡарлеген туҡтатыу маҡсатында атҡарыла һәм төп БДИ мәсьәләләренә бик оҡшаш буласаҡ.

Тимәк, сығарылыш синыф уҡыусыларына әҙер мәсьәләләр бар тип алданмаҫҡа, ә ентекле итеп имтихандарға әҙерләнергә кәрәк!

## "Аманат"лы балалар беҙ!




Беҙҙең мәктәптә "Аманат" журналының 85 йыллыҡ юбилейына арналған кисә үтте. Уны уҡытыусыбыҙ Юлиә Шәрипова журналдың бай тарихына байҡауҙан башлап ебәрҙе. Юлиә Салауат ҡыҙы "Аманат"ты хәреф таный башлағандан уҡ уҡып бара икән. Шундай матур, сағыу журналға 85 йыл булып киткәненә ышаныуы ла ҡыйын.

Артабан уҡыусылар "Аманат"тан ятлаған шиғырҙарын һөйләп ярышты. Наида Әминова менән Руслан Ҡашапов – 1-се, Илүзә Кунафина менән Аделина Мөхәмәтйәнова – 2-се, ә Гөлназ Хәсәнова менән Азалия Зиннәтуллина 3-сө урынды алды.

Күңелле йырҙар, матур бейеүҙәр менән барған байрам аҙағында уҡыусылар "Аманат"ҡа күмәкләп яҙылырға һүҙ бирҙе.

**Наида ӘМИНОВА,**
**Туймазы районы Серафимовка ауылының 1-се һанлы мәктәбе уҡыусыһы.**

Беҙҙең сайт: www.amanatrb.ru
bashamanat
vk.com/amanatrb

# «Аманат» булһа ҡулыңда, Ҡояш бал

«Аманат» булһа ҡулыңда,
Ҡояш балҡыр юлыңда!

